Рух һүнмәһә, ил йәшәр!

# Салауат

№ 16 (2030) 12+
20 апрель, 2023 йыл, кесаҙна

Салауат ҡалаһының ижтимағи-сәйәси гәзите
1999 йылдың ноябренән сыға
һатыуҙа хаҡы ирекле

## Мөғжизәләр иленә сәйәхәт

**Барыһыҙға ла билдәле булыуынса, ҡалабыҙҙың олпатлы, абруйлы, бай тарихлы Салауат башҡорт дәүләт драма театры үҙенең 90 йыллыҡ юбилейын билдәләй. 28 апрелдә мәҙәниәт усағына арналған «Мөғжизәләр иле - ТЕАТР» исемле юбилей кисәһе (6+) уҙа.**

Сценарий авторы - Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Динара Ҡәйүмова.

пациенттарға барып, кәрәкле тикшереүҙәр уҙғарыуға һәм алынған мәғлүмәттәрҙе дауалаусы врачҡа ебәрергә мөмкинлек бирә.

«Һаулы ФАП» мобиль диагностика аппарат-программа комплексы, икенсе төрлә итеп әйткәндә, телемедицина консультациялары уҙғарыу өсөн СберМедИИ компанияһынан «Сбер-сумаҙан» алдыҡ. Беҙ уны диспансеризация бүлегенә тапшырабыҙ», - тип аңлата ҡала дауаханаһының баш врачы Илшат Яппаров.

** Киләсәк - йәштәр ҡулында*

# Уҡыусыларҙың башланғыстарына уңыштар

Уҡыусылар мәктәптә нисек күрергә теләй?

«Мәктәп уҡыусыларының инициативаларын бюджетлау» конкурсы иғлан ителде. Нимә ул, нисек ул? Яңы һүҙҙәр һәм яңы проект булһа ла, хәҙерге заман быуын кешеләрен улар ҡурҡытмай. Программаны ентекле өйрәнеп сыҡҡандан һуң: "Ҡатнашайыҡ!" тип хәл иттек. Ойоштороу мәсьәләләрендә бергәләшеп эшләү өсөн беҙ Салауат ҡалаһының 4-се, 18-се, 21-се һәм 24-се мәктәптәре берләштек. Ә үткән йылғы 21-се мәктәптең ыңғай тәжрибәһе беҙҙе илһамландырҙы, тип белдерәләр 4-се мәктәп коллективы.

Балаларҙың ижади төркөмө мәктәптең инфраструктураһын яҡшыртыр өсөн үҙҙәренең проҡект эштәрен әҙерләй. Улар үҙҙәренә нимә ҡыҙыҡлы, нимәне тормошҡа ашырырға теләйҙәр, шуны тәҡдим итә. Киләһе этапта улар проекттары менән таныштыралар, уны яҡлайҙар. Һуңынан тауыш биреү ойошторола. Иң күп тауыш йыйған проект артабан ҡатнашыу өсөн Өфөгә ебәрелә. Һөҙөмтә июль айында билдәле буласаҡ.

Программаның үҙенсәлеге шунда, балалар ниндәйҙер конкрет алым менән проектты тормошҡа ашырыу өсөн үҙ өлөштәрен индерә ала: йыйыштырыу, суп-сар сығарыу, материалдар килтереү һәм башҡалар.

Инициатив бюджетлау командала эшләргә өйрәнеүгә, тикшеренеү, тәрән интервьюлар үткәреү күнекмәләрен үҫтереүгә, үҙ идеяларыңды асыҡтан-асыҡ күрһәтеүгә, финанс грамоталылыҡ белемен арттырыу һәм бюджет процестарын аңлауға, социаль яуаплылыҡ тойғоһон үҫтереүгә юл аса.

# Уҡыусыларҙың башланғыстарына уңыштар

1-се бит

Программала ҡатнашыу өсөн кәм тигәндә биш проектты тәҡдим итергә кәрәк. Бөтә мәктәптәрҙә лә улар төрлө. Мәҫәлән, 4-се мәктәп балаларының теләктәре:

1. "Дуҫлыҡ өсөн футбол" яһалма япмалы футбол майҙансығы төҙөү;

2. Мәктәп китапханаһының уҡыу залына "Беҙҙең менән уҡығыҙ" мультимедия йыһазын алыу;

3. Мәктәп фойеһында "Мәктәптә матурлыҡ һәм бәхтәлек йәшәһен" ял итеү зонаһын йыһазландырыу;

4. Тамашалар залына "Тамашалар залы - ижад лабораторияһы" музыкаль һәм мультимедия ҡорамалдарын алыу;

5. "Йыл әйләнәһенә - спорт" урам тренажерҙарын алыу.

Бер нисә көндән мәктәптең бөтә 5-11-се класс уҡыусылары тауыш биреүҙә ҡатнаша.



21-се мәктәп уҡыусылары ла бик күп тәҡдимдәр, үҙ проекттарын әҙерләй. Мәҫәлән, бер төркөм «Мөмкинлектәр мөхите. Тамашалар залын яңыртыу» проекты менән сығыш яһап, тамашалар залын ысын ижади майҙансыҡ итеп яңыртыу теләгән белдерһә, ҡыҙҙар төркөмө мәктәптә фитнес зал булдырыу идеяһын күтәреп сыға. Шулай уҡ мәктәп фойеһында ял зонаһы, мәктәп тиры, химия кабинетында лаборатория, мәктәп медиа студияһы, йүгереү юлын яҡшыртыу проекттары ла тәҡдим ителә.

Һөҙөмтәлә Салауат ҡалаһының 21-се мәктәбендә «Мөмкинлектәр мөхите. Тамашалар залын яңыртыу», шулай уҡ 24-се мәктәптә "Инициатив мәктәптәр үҙәге", 18-се мәктәптә "Тамашалар залы - уҡыусыларҙың үҫеш үҙәге" проекттары еңә.

Бөтә булған документтарҙы әҙерләп, ыңғай һөҙөмтәләр көтөргә ҡала.